# «СӨМБӨЛДӨҢ ЕТЕНСЕ ЙӘЙЕ»





Фильмдан кадрҙар

*«Башҡортостан» дәүләт киностудияһы төшөргән тулы метражлы яңы нәфис фильм шулай тип атала. Фильмдың сценарийы яҙыусы һәм драматург Таңсулпан Ғарипованың «Йәй ташы» драмаһы буйынса яҙылған. Драмала ваҡиғалар репрессиялар осороноң кульминацион нөктәһе — 37-се йылда бара. Киноның экрандарға сығыуы айканлы әҫәрҙең авторына бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.*

**— Таңсулпан Хизбулловна, кинодрама нигеҙенә шәхес культы ҡорбандарын алып ни әйтергә теләнегеҙ?**

— Беренсенән, һәр дәүләт, һәр милләт кино жанры менән үҙенең тарихи үткәненә мөрәжәғәт итә, ил яҙмышында тәрән эҙ ҡалдырған ваҡиғаларға йомғаҡ яһай. Ә Сталин репрессиялары Башҡортостан тарихында эҙһеҙ үтмәгән: 1930—1953 йылдар, ни генә тимә, 50293 кеше ғүмерен алып киткән.

**— Ошо ҡатмарлы осорҙо кинотаҫмала һынландырыу байтаҡ сығымдар ҙа, режиссер маһирлығын да, кино төшөрөүсе төркөмдөң оҫталығын да талап иткәндер бит?**

— Дөрөҫ, барыһы ла кәрәк. Киноны сәнғәттең ауыр индустрияһы тиҙәр. Был ысынлап та шулай икән. Йылдан ашыу ваҡыт «Башҡортостан» киностудияһының ижади төркөмө менән аралашыу, бергә эшләү дәүерендә мин быға яҡшы төшөндөм. Сығымдарға килгәндә, улар әллә ни ҙур булманы. Беҙ юрғаныбыҙға ҡарап ҡына аяҡты һуҙырға тырыштыҡ. Ә инде режиссерға килгәндә, был фильм Булат Йосоповтоң тәүге эше түгел. Егетебеҙ фильмдан фильмға тәжрибә туплай, үҫә. Булатта белем дә, ныҡышмалылыҡ та етерлек. Йәштәргә ышанырға кәрәк — был фильмды ҡараған һәр кеше, моғайын, шул фекерҙе әйтер. Актерҙар составына килгәндә, беҙҙә уларға, шөкөр, ҡытлыҡ юҡ. Шулай ҙа, мин әйтер инем, был фильмға улар бик уңышлы һайланған. Грим һалыу ҙа, биҙәнеү-төҙәнеү ҙә, «уйнау» ҙа юҡ — барыһы ла хәс тормоштағыса, ябай һәм тәбиғи.

**— Әҫәр «Йәй ташы» тип атала, ә фильм — «Сөмбөлдөң етенсе йәйе»...**

— Эйе, шулай. Фильм төшөрөлгән саҡтағы ғүмеренең байтағын «Йәй ташы» исеме менән йәшәне. Аҙаҡ үҙгәрттеләр. Бәлки, сценарий авторы Мәғәфүр Тимербулатов яңы исем тәҡдим иткәндер. Эш бит исемдә түгел. Тамашасылар, фильмды ҡарағас, йәй ташы хаҡындағы риүәйәтте ишетерҙәр, унының фильмға йомшаҡлыҡ, наҙлылыҡ өҫтәүен төшөнөрҙәр, моғайын.



Фильмды тыуҙырыусылар

**— Тимәк, был ижади төркөмдөң киләсәктә ҙур эштәр башҡарасағына ышанырға була?**

— Һис шикһеҙ.

*Зөһрә Алтынбаева әңгәмәләште.*
*Фаил Абсаттаров фотолары.*